*Нияз МӘЖИТОВ,*
*Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы*
*Башҡарма комитеты рәйесе*

# МИЛЛӘТТЕ ТЕРГЕҘЕҮ — БӨТӘ ХАЛЫҠ ЭШЕ

*(Стәрлетамаҡ калаһы башҡорттары ҡоролтайындағы сығышы)*

Бөтәгеҙҙе лә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы исеменән иҫтәлекле ваҡиға — Стәрлетамаҡ ҡалаһы башҡорттарының ҡоролтайы асылыуы менән ысын күңелдән ҡотларға рөхсәт итегеҙ.

Мин һеҙҙең ҡоролтайығыҙҙа ҙур ҡәнәғәтләнеү хистәре кисерәм. Ҡоролтайығыҙ бик йөкмәткеле, сығыштар ҡала ҡоролтай ойошмаһы, халыҡтың, милләттең яҙмышы тураһында фекерҙәргә бай. Шулай булырға тейеш, сөнки Стәрлетамаҡ — Башҡортостандың элекке башҡалаһы, Өфөнән ҡала республикала икенсе иң ҙур иҡтисади һәм сәйәси үҙәк. Һеҙҙә уҡымышлы кешеләрҙе туплаған юғары уҡыу йорттары, театрҙар күп, заводтары бар, ижтимағи тормош ҡайнап тора. Ошо объектив факттарҙан сығып фекер йөрөткәндә, әлбиттә, ҡала ҡоролтайы ойошмаһының эше етди тәнҡиткә, талапсан анализлауға лайыҡ һәм был йәһәттән беҙҙең бөгөнгө ҡоролтайыбыҙ үҙ маҡсатына иреште һымаҡ. Һис шикһеҙ, ҡоролтайҙың ҡала ойошмалары 5 йыл араһында башҡарған эш һөҙөмтәләре байыраҡ, күҙгә сағылырлыҡ булырға тейеш ине. Әлбиттә, ҡала ҡоролтайы иғтибарынан ситтә, ләкин ҡала башҡорттары өсөн һаман көнүҙәк мәсьәлә булып ҡалған проблемалар күп. Мәҫәлән, Өфөнән ҡала иң ҙур Стәрлетамаҡ ҡалаһында башҡорт телендә сыҡҡан гәзит юҡ, ҡалала мәктәп йәшендәге 5000-дән ашыу башҡорт балаһы бар, ләкин уларҙы әсә телендә уҡытыу ҡәнәғәтләнерлек түгел. Ҡалалағы башҡорт мәктәбенең матди базаһы үтә насар, уның хәҙерге хәлен башҡорт милли мәктәптәренең етешмәгән яҡтарын пропагандалау тип кенә ҡарарға мөмкин. Беҙгә был күренеш күптән мәғлүм һәм бөгөнгө ҡоролтай һымаҡ сараны Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты күптән ойошторорға тейеш ине. Был етешһеҙлектең төп сәбәбе бәлки Үҙәк башҡарма комитеттың эште тейешле кимәлдә ойоштора алмауы менән бәйләнгәндер. Хатаны мин иң тәүҙә үҙ өҫтөмә алам. Бер нисә йыл инде бөгөнгө осрашыуҙы үткәрергә йыйындыҡ, тик бөгөн генә үҙ моратыбыҙға ирешә алдыҡ һәм бөгөнгө ҡоролтайҙы ойоштороуҙа күрһәткән ярҙамы өсөн мин бөтәгеҙ исеменән ҡала башлығына — Спартак Ғәли улы Әхмәтовҡа рәхмәт һүҙҙәре әйтәм. Мин уның республикала танылған дәүләт эшмәкәре икәнлеген белә инем, ә бөгөнгө ҡала тормошона бағышланған, ҡала башҡорттарының рухи донъяһына күҙаллауҙарҙы эсенә алған докладын тыңлағандан һуң уның ысынлап та шундай сифаттарға бай икәнлегенә ышандым. Киләсәктә һеҙ етәкләгән ҡала мэрияһына ҡала башҡорттарының мохтажлығына, уй-кисерештәренә, киләсәге һәм бөгөнгөһөнә ҡарата иғтибарлыраҡ, уларҙы тормошҡа ашырыуҙа атҡарыласаҡ эштәре мөһимерәк булыр тигән уйҙарҙы әйтеп ишеттерәһе килә.

Хөрмәтле милләттәштәр! Халҡыбыҙҙың йәшәү шарттарын яҡшыртыу, уны заман талабы кимәленә күтәреү өсөн беҙгә бик күп эшләйһе бар әле. Рәсәй Федерацияһы, тыуған Ватаныбыҙ, Башҡортостан төрлө яҡлап бай, ләкин, тулайым алғанда, бөгөнгө тормошобоҙ үтә ярлы һәм һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Был етешһеҙлек, берҙән, тиҫтәләгән йылдар буйы хакимлыҡ иткән сәйәси системаның мираҫы,

икенсенән, Рәсәй дәүләтендә бөгөн дауам иткән сәйәси хаталарҙың туранан-тура һөҙөмтәһе. Һуңғы 10-20 йыл эсендә генә СССР, Рәсәй үҙ ирке менән ниндәй генә ҡанлы һуғыштар, бәрелештәр ойошторманы, меңәрләгән замандаштарыбыҙҙы ҡорбан итмәне. Чечен халҡының ҡанлы фажиғәһе хәҙерге Рәсәй өсөн сикһеҙ ғәрлекле күренеш. Беҙ аңлы кешенең башына һыймаҫлыҡ күренештең тере шаһиттары — чечен халҡының гөрләп торған тормошон утҡа тот та, хәҙер шул яндырған ҡулдар менән иртәгәһенә уларҙы яңынан төҙө, имеш. Бындай ҡанлы һәм емерткес ваҡиғалар элекке һәм хәҙерге Рәсәй дәүләте етәкселегенең үҙ халыҡтарының тормошон яҡшыртыуға, милли мәҙәниәтен үҫтереүгә, башҡорт, мари, мордва, татар кеүек халыҡтарҙың үҫешенә тейешле шарттар тыуҙырырлыҡ гуманлы программаһының булмауы тураһында һөйләй.

Киреһенсә, СССР тарҡалғандан һуң ҡалған Рәсәй етәкселеге һуңғы 3-4 йыл араһында 1990-93 йылдарҙа иғлан ителгән демократик үҫеш юлынан кире ҡайтып, элекке тормошто һәм колониаль режимды ҡайтарырға тырыша. Быға миҫал итеп Рәсәй составындағы милли республикаларҙың үҙаллылығын төрлө яҡлап сикләү, милли килемдәрҙең күп өлөшөн Үҙәк өсөн тартып алыу, хәрби генералдар етәкселегендә федераль округтарҙы төҙөүҙе әйтеү ҙә етә. Ә бына хәҙер Рәсәйҙә индерелә башлаған яңы паспорттарҙа граждандарҙың милләтен күрһәткән графаның булмауы үтә ҡурҡыныс күренеш. Милләт тураһында мәғлүмәттең булмауы яҡын арала (10-12 йыл эсендә) Рәсәй дәүләтенең күп милләтле дәүләттән бер, тик рус милләтенән генә торған дәүләткә әйләнәсәгенә туранан-тура тупаҫ аҙым. Был „бөйөк шовинистик“ сәйәсәт башҡорттар кеүек халыҡтарҙы бөтөрөүгә, ассимиляциялауға йүнәлтелгән һәм беҙ быны асыҡ аңларға тейешбеҙ. Халҡыбыҙ, шул иҫәптән башҡа халыҡтар ҙа быуаттар буйына йәшәһен тиһәк, беҙ был күренешкә ҡаршы торорға тейешбеҙ.

Хәҙерге тормошобоҙҙың икенсе бер үҙенсәлеге: элекке совет власы осорондағы төрлө сикләүҙәрҙең бөтөнләй бөтөрөлөүе — иҡтисади иркенлек: эшлә, мал үҫтер, һатыу ит, балалар үҫтер, уларҙы ашат, кейендер, кеше ит. Әммә бөтәбеҙгә мәғлүм: беҙҙең күбебеҙ килеп тыуған иркенлектән тейешенсә файҙалана белмәйбеҙ, „алма беш, ауыҙыма төш“, йә булмаһа, элеккесә „райком, колхоз ашатыр әле“ тигән уйҙар менән йәшәй бирәбеҙ. Был йәһәттән Ҡоролтай ойошмалары, уның активистары дәүләт идара органдары менән бергәләп ауылдарҙа, микрорайондарҙа ҙур аңлатыу, ойоштороу эштәре алып барырға бурыслы. 2001 йылды „Әсә йылы“ тип иғлан иткән Башҡортостан Президенты М.Ғ.Рәхимов Указының төп идеяһы — ошо маҡсатты һәр ғаиләгә еткереү, уны төрлө етештереүсе хеҙмәткә йәлеп итеү, уның өсөн шарттар тыуҙырыу.

Беҙҙең ойошма — Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, был Указды ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды. Һеҙҙең бөтәгеҙгә лә мәғлүм, 2000 йылдың сентябрендә беҙ Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының съезын үткәрҙек һәм унда, башҡорт халҡының киләсәге һәр башҡорт ғаиләһенең яҙмышы, уның иҡтисади хәленең ныҡлығы, балаларының күплеге, уларҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, тәрбиәле, белемле булыуы менән бәйле, тигән фекер өҫтәмә рәүештә билдәләп үтелде.

Съезда махсус рәүештә Президентыбыҙ М.Ғ.Рәхимовтан 2001 йылды „Әсә йылы“ тип иғлан итеүҙе һораған мөрәжәғәт ҡабул ителде. Күрәһегеҙ, беҙҙең теләк тулыһынса ҡабул ителде һәм хәҙер беҙ бөтә республика кимәлендә „Әсәнең башҡорт ғаиләһенең яҙмышындағы роле“ тигән девиз менән ҙур аңлатыу, ойоштороу эшен һеҙҙең бөгөнгө ҡоролтайҙа башлап ебәрергә булдыҡ. Республиканың күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, атаҡлы ғалимәбеҙ Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинованың күп мәғлүмәтле доклады һәм делегаттарҙың сығыштары был башланғыстың һөҙөмтәле, йәғни файҙалы булыуы тураһында һөйләй.

Хөрмәтле милләттәштәр! Мин тағы бер мәсьәләгә туҡталмай булдыра алмайым. Республика йәмәғәтселеге Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы рәйесенә Башҡортостан халыҡтары Ассамблеяһы Советы рәйесе вазифаһын йөкмәтте. Мин был бурысты башҡорт халҡына күрһәткән ҙур яуаплылыҡ һәм ышаныстың бер билдәһе тип ҡарайым. Республикабыҙҙың халҡы — күп мил-

ләтле, ҡайҙа ғына барма — беҙҙе төрлө милләт халҡы солғап алған һәм был күп милләтлелек — беҙҙең, йәғни һәр милләттең ҙур байлығы, уның донъя цивилизацияһынан мәхрүм булмайынса, уның менән бергә йәшәргә көс, дәрт биреүсе объектив күренеш. Шуға күрә беҙ илебеҙҙә милләт-ара аңлашыуҙы, хеҙмәттәшлекте, дуҫлыҡты нығытырға кәрәклеген аңлап эш итергә тейешбеҙ. Бер милләт вәкилен икенсеһенә ҡаршы ҡуймаҫҡа, һәр ваҡыт сабырлыҡ күрһәтеүҙе лә онотмайыҡ. Мин был йәһәттән Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәте башлығы Спартак Әхмәтовтың ниндәй ҡатмарлы һәм үтә яуаплы эш алып барғанлығын аңлайым. Шул уҡ ваҡытта мин, Ҡоролтай рәйесе булараҡ, Башҡортостан — башҡорт халҡының берҙән-бер тарихи иле, һәм үҙен халыҡ итеп һаҡлап алып ҡала торған милли республикаһы икәнлеген, ә Стәрлетамаҡ Башҡортостандың үҙәк ҡалаларының береһе икәнлеген онотмаһын ине тип һорар инем.

Беҙ, башҡорттар, хуш күңелле халыҡ булараҡ, Президентыбыҙҙың 2001 йылды „Әсә йылы" тигән Указын тормошҡа ашырыу тураһында фекер алышҡанда әйтелгән һәр фекеребеҙ республикалағы башҡа милләттәрҙең һәр ғаиләһенең яҙмышын күҙ уңында тотоп, уларҙың да яҙмышын үҙ иңебеҙгә һалып, уртаҡ хәстәрлек күрергә тырышырға тейешбеҙ. Был талап бер башҡорттарға ғына ҡайтып ҡалмай, ә республикала йәшәгән һәр милләт ғаиләһенә, вәкиленә лә ҡағыла. Тик шул саҡта ғына, йәғни үҙеңде ҡайғыртҡанда, күршең тураһында уйлағанда ғына милләттәр араһындағы аралашыу һәм хеҙмәттәшлек ысын дуҫлыҡ кимәленә күтәреләсәк. Ҡоролтай делегаттарының сығыштарын тыңлағанда минең башҡа бөгөнгө ҡоролтай исеменән республика халыҡтарына „Әсә йылы" кампанияһын нисек үткәреү тураһында бәлки махсус мөрәжәғәт ҡабул итеү ҙә кәрәктер тигән уй килде.

Сығышымды бөгөн һайланасаҡ ҡала ҡоролтайы башҡарма комитеты артабанғы эшмәкәрлеген эҙмә-эҙлеклерәк, ҡала хакимиәте менән берлектә аңлашып, бер-береһенә ярҙам итеп ойоштороп, тигән теләк менән тамамлағым килә.